*Зөһрә АЛТЫНБАЕВА*

# Ҡыуаныслы ижад


*Ләлә Муллабаева*

Киске эңер офоҡ биттәрен иркәләгән илаһи мәл. Күптәр өсөн эш көнө тамамланмаған, күңелдәр талғын моңға урала...

Үтте лә китте йәшлегем,
Үткәнен дә тойманым.
Йә үтмә, тип, йә китмә, тип,
Үҙен бер ҙә тыйманым...

Күңел ҡылдарын тетрәткән ошо моң өлкәндәргә йәшлек иленә алып ҡайта, якты хәтирәләре, илаһи серлелеге менән арбай. Был моңло йырҙы беҙгә илтеүсе — танылған йырсы Ләлә Муллабаева. Яратҡан шағирыбыҙ Рәми Ғариповтың тетрәндергес һүҙҙәренә талантлы композитор Роза Сәхәүетдинова ижад иткән был йыр оҫта йырсы башҡарыуында тыңлаусыны битараф ҡалдырмай, үҙе менән үткән йәшлек иленә әйҙәй. Өс талант бергә ҡушылып тыуған, йылдар ҙа, юлдар ҙа юя алмаған ижад күңелдең иң нескә хистәрен тетрәндереп кенә ҡалмай, күкрәктән урғылып сығып, бар ғаләмде илаһи моңға сорнай.

Ғөмүмән, Ләлә Муллабаева композитор Роза Сәхәүетдинованың бик күп йырҙарын тәүгеләрҙән булып йыр-моң һөйөүселәрҙең күңеленә илтеүсе. Үрҙә әйтелгән «Үтте лә китте йәшлегем» (Рәми Ғарипов һүҙҙәре), «Елдәр сиртә тәҙрәмә» (Римма Шахмуллина һүҙҙәре), «Үҙең бүләк» (Уран Кинйәбулатов һүҙҙәре) һәм башҡа йырҙарҙы радио тыңлаусылар ҙа, телевизор ҡараусылар ҙа тап уның башҡарыуында ҡабул итеп өйрәнгән. Әйткәндәй, Башҡортостан телевидениеһы каналында популярлыҡ яулаған «Йырым булһын бүләгем» тапшырыуына ошо йырҙы тап Ләлә ханым башҡарыуында биреүҙе һорап бихисап хаттар килә. Әлбиттә, Башҡортостан радиоһы һәм телевидениеһы фондында Ләлә Муллабаева башҡарған йырҙар байтаҡ. Улай ғына ла түгел, танылған һәм халыҡ яратҡан йырсы Ғүмәр Әбделмәнов менән башҡарған дуэттары эфир аша иртән дә, кисен дә яңғырай.

— Ғүмәр ағай менән осраҡлы рәүештә генә таныштыҡ, — тип хәтерләй Ләлә Зөфәр ҡыҙы. — Шулай, тәүге осрашҡанда уҡ Роза Сәхәүетдинова Мостай Кәрим һүҙҙәренә ижад иткән «Янып-шашып» тигән йырҙы өйрәнеп, яҙҙырып та ҡуйҙыҡ. Артабан Ғүмәр ағай менән хеҙмәттәшлек тағы ла нығынды. Айырыуса Роза Сәхәүетдинова яҙған

һәм беҙ икәүләп башҡарған йырҙар популярлыҡ яуланы. «Юғалма юлдарымдан» (Кәбир Аҡбашев һүҙҙәре), «Һәр көндө керәһең төшөмә» (Радик Нуретдинов һүҙҙәре), «Күңелемдә һин, иркәм» (Кәбир Аҡбашев һүҙҙәре), «Әйҙә киттек Дим буйына» (Гөлфиә Юнысова һүҙҙәре) һәм башҡа йырҙар нисә йылдар инде беҙҙең башҡарыуҙа яңғырай. Ғүмәр ағай менән ижад юлында осрашыуыма ифрат шатмын.

Йырсы йырҙа дан ала. Ләлә Муллабаева иһә үҙе талантлы йырсы булыу менән бер рәттән, йырсылар әҙерләүсе лә. Бына егерме йылдан ашыу ул режиссура һәм актерлыҡ оҫталығы кафедраһында буласаҡ актерҙарҙы йырларға өйрәтә. Ошо ваҡыт арауығында йөҙләгән йәш кешене йырлау оҫталығы серҙәренә төшөнөргә өйрәткән ул. Уның уҡыусылары М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында, «Нур» Өфө дәүләт татар театрында, Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында, Салауат дәүләт башҡорт драма театрында, А.Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма һәм башҡа театрҙарҙа уңышлы эшләйҙәр, остаздары асҡан оҫталыҡ кимәлен күтәрәләр. Уҡыусыларының ҙур уңыштары ошоно тағы бер раҫлай. М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актеры, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Азамат Ғафаров «Актер йыры—94» бәйгеһендә лауреат булһа, Башҡортостандың атҡаҙанған артисткаһы Алһыу Ғәлина-Ғафарова 1996 йылда «Актер йыры» бәйгеһендә беренсе урын яулаған. Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, «Урал моңо—95» халыҡ-ара конкурсы, «Ирәндек моңдары—96», «Актер йыры—98» бәйгеләре лауреаты Сәғиҙулла Байегет, Башҡортостандың атҡаҙанған артисткаһы, «Урал моңо—92», «Дуҫлыҡ йыры», «Ирәндек моңдары» бәйгеләре лауреаты, «Аманат—1996» бәйгеһендә Гран-при яулаған, «Актер йыры—98» бәйгеһе

*Театр бүлегенең беренсе сығарылыш студенттары менән*





*Талантлы уҡыусылары менән*

дипломанты Алһыу Бәхтиева, бихисап бәйгеләрҙә призлы урындар алған Гөлшат Ғайсина, Гөлдәр Ишҡыуатова, Гөлсөм Бикбулатова, Гөлназ Мөхәмәҙиева һәм башҡалар тап Ләлә Зөфәр ҡыҙының тырышлығы менән оҫталыҡҡа ирешкән.

1992—1998 йылдарҙа Ләлә Зөфәр ҡыҙы «Нур» дәүләт татар театрында вокал буйынса педагог булып эшләй. Тап ошо осорҙа йәш коллективтың ижади үҫешенә ҙур өлөш индерә ул. Талантлы педагог театр сәхнәһендә уңышлы барған «Башмағым», «Аршин мал алан» һәм башҡа музыкаль комедияларҙы тамашасы күңеленә бар матурлығында, әҫәр йөкмәткеһен моң һәм йыр аша асыуға айырыуса күп көс һала. Оҫта педагог булараҡ, Ләлә Зөфәр ҡыҙы драма актерҙарының оҫталығын вокал сәнғәте менән органик берләштереүгә өлгәште.

1992 йылда «Нур» театры өсөн Өфө дәүләт сәнғәт академияһында махсус курс туплана. Буласаҡ актерҙар сәхнә оҫталарынан сәхнә серҙәренә өйрәнһә, Ләлә Зөфәр ҡыҙы уларҙы йыр сәнғәте нескәлектәре менән таныштыра, күптәрҙең йырсы һәләтен асыуға өлгәшә. Уҡыусылары һынатмай: хәҙер инде Башҡортостандың атҡаҙанған артисткалары Гөлназ Мөхәмәҙиева менән Миңлинур Сәйетова «Актер йыры» бәйгеһендә, Илгиз Ғәлиев — «Урал моңо—96», Рөстәм Ғәлиев «Татар йыры—2000» бәйгеләрендә лауреат булды. Улар әле лә уҡытыусылары менән даими бәйләнеш тота.

Ләлә Зөфәр ҡыҙы иһә уҡыусыларының һәр уңышына ихлас ҡыуана. Шуны ла әйтеү мөһим, Ләлә ханым йәштәрҙе йырлау оҫталығына өйрәтеү менән генә сикләнмәй, милли музыкаға, халҡыбыҙҙың изге йолаларына, һәр юлы үҙе бер тарих булған боронғо йырҙарға һөйөү, ихтирам тәрбиәләй. Педагог, йырсы булараҡ ошо бай ҡомартҡыларҙы килер быуындарға илтеү өсөн күп көс һала.

1998 йылдан алып Ләлә Зөфәр ҡыҙы Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында вокал буйынса педагог вазифаһын алып бара. Тап ошо йылда театр сәхнәһендә М.Фәйзиҙең «Аҫылйәр» спектакле ҡуйыла. Ләлә Муллабаева актерҙарҙың йырҙарҙы оҫта башҡарыуына өлгәшә, һәм тамаша ҙур уңыш ҡаҙана. Артабан уның педагог һәләте милли театрыбыҙ сәхнәһендә «Нәркәс» (режиссеры — И.Йомағолов, композиторы — У.Иҙелбаев), «Башмағым» (Х.Ибраһимов, режиссеры — И.Ғиләжев), «Һуңғы Ғәйнә» (А.Иҙелбаев, режиссеры — И.Ғиләжев), «Тиле йәшлек» (И.Абдуллин, режиссеры — Т.Бабичева), «Өҙөлгән туй» (З.Атнабаева, режиссеры — Р.Хәкимов) һәм башҡа спектаклдәрҙе ҡуйғанда айырыуса киң асыла.

Ләлә Зөфәр ҡыҙының вокал буйынса уңышлы педагогик эшмәкәрлеге театрҙа эшләгән йәш актерҙарҙың һәләтен асыуға булышлыҡ итә. 1998 йылда уҙған «Актер йыры» бәйгеһендә театрҙан бер юлы өс кеше — Светлана Хәкимова, Сәғиҙулла Байегет, Алһыу Ғәлиналар еңеүсе булһа, 2004 йылғы бәйгелә актриса Фирүзә Аллаярова (Фирүзә Париж) 1-се урынды яулай.

Ғөмүмән, ул уҡытҡан актерҙарҙың күбеһе йырсы булараҡ та киң танылыу яулап өлгөргән шәхестәр. Әйтәйек, Алһыу Бәхтиева, Сәғиҙулла Байегет, Азамат Ғафаров, Азат Йыһаншин, Алһыу Ғәлина, Светлана Хәкимовалар талантлы драма актерҙары булыу менән бергә оҫта йырсы булып танылды, улар хәҙер бер нисә аудио-, видеокассета, компакт дискылар әҙерләп сығарған.

Әле М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында ҙур уңыш менән барған «Ҡоҙаса» музыкаль комедияһында ла Ләлә Зөфәр ҡыҙының хеҙмәт өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Был әҫәрҙә 28 йыр

*"Нәркәс" спектакленән һуң*



яңғырай, улар араһында вокал партиялары ла, дуэттар ҙа бар. Вокал буйынса педагог булараҡ, Ләлә Муллабаева бығаса билдәле әҫәрҙең өр-яңыса яңғырауына өлгәшкән, һәр йырсы үҙ партияһын юғары кимәлдә башҡарыуға ирешкән. Музыкаль комедиялағы иң сағыу образдарҙың береһен — Шәмсиә ролен Ләлә Зөфәр ҡыҙының яраткан уҡыусыларының береһе, Башҡортостандың атҡаҙанған артисткаһы Алһыу Бәхтиева бар оҫталығын һалып башҡара. Ғөмүмән, был спектакль заманыбыҙ өсөн яңы күренеш, инде билдәле әҫәрҙең яңыса яңғырашы, һәм ул тамашасы күңеленә хуш килде, юғары баһа алды.


*Ләлә Муллабаева һәм Алһыу Бәхтиева*

Ләлә Зөфәр ҡыҙы Муллабаева Дәүләкән районының Суйынсы ауылы ҡыҙы. Был ауыл үҙенең данлыҡлы шәхестәре менән республикабыҙҙа ғына түгел, унан ситтә лә киң билдәле. Талантлы хирург, оҫта рәссам, үткер ҡәләм оҫтаһы Наил Ғатауллин, табиб, заманында оҙаҡ йылдар республикабыҙҙың һаулыҡ һаҡлау министры булып эшләгән Миңлеғәли Камалов, фән докторҙары Лена һәм Фәнил Саяховтар һәм башҡалар ошо ауылда тыуып үҫкән. Ләлә Зөфәр ҡыҙы ла тап ошо талант эйәләренең береһе. 25 йылдан ашыу ғүмерен йыр-моңға бағышлаған, йырсылар тәрбиәләүгә арнаған ул. Башҡортостан мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы, СССР-ҙың мәғариф отличнигы, Өфө дәүләт сәнғәт академияһы доценты Ләлә Зөфәр ҡыҙы Муллабаеваның Башҡортостан сәнғәте үҫешенә индергән өлөшө бик ҙур. Сәнғәт училищеһын, Өфө дәүләт сәнғәт институтын тамамлағас, ул егерме йылға яҡын Башҡортостан Композиторҙар союзы менән берлектә яңы йырҙарҙы пропагандалау эше менән шөғөлләнә. Ул йылдарҙа әүҙем ижад иткән композиторҙар З.Исмәғилев, Р.Сәлмәнов, Р.Сәхәүетдинова, Н.Дауытов һәм башҡаларҙың өр-яңы ижад емештәрен халыҡ күңеленә илтә. Ул алып сыҡҡан йырҙар халыҡ араһында тиҙ арала таралып, популярлыҡ яулай.

Тап ошо йылдарҙа талантлы актер Биктимер Муллабаев менән осрашып, матур ғаилә ҡора улар. Иш янына ҡуш булып улдары Илнур тыуа. Театр һөйөүсе тамашасылар Биктимер Муллабаев башҡарған Йыһан ҡарсыҡ («Башмағым»), «Ай тотолған төндө» нәфис фильмындағы Диуана ролдәрен әле лә яҡшы хәтерләй. Ҡыҫҡа ғына сәхнә тормошонда һоҡланғыс образдар ижад иткән актер яман шеш ауырыуынан иртә үлеп китә. Ғүмер юлдашын һауыҡтырыу өсөн бар көсөн һалған Ләлә Зөфәр ҡыҙы улы Илнур менән яңғыҙ ҡала.

— Беҙ Биктимер менән ун йыл ғына йәшәп ҡалдыҡ, — тип хәтерләй Ләлә апай. — Әммә әкиәттәгеләй бәхетле йылдар булды улар. Уның



*Иң кәҙерлеләре — улы Илнур, килене Мәҙинә һәм ейәне Ильяс менән*

һөйөүе, ихтирамы, иғтибары мине ғүмер буйы йылытырға етте. Уҡығанда ла, эшләгәндә лә терәк, ярҙамсы булды ул миңә. Иҫ киткес кеше ине ул минең Биктимерем.

Ләлә Зөфәр ҡыҙы талантлы йырсы, һәләтле уҡытыусы булыу менән бергә изге йөрәкле әсәй һәм өләсәй. Берҙән-бер улы Илнур ҙа сәнғәт юлын һайлаған: Өфө дәүләт сәнғәт академияһының актерҙар әҙерләү факультетын, артабан Рәсәй театр сәнғәт академияһының режиссерҙар әҙерләү бүлеген тамамлаған. Әле Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында режиссер вазифаһын атҡара. Тәүге хеҙмәт емештәре — «Диләфрүзгә дүрт кейәү» (Т.Миңнуллин), «Романтиктар» (Ростан) спектаклдәре ҙур уңыш ҡаҙанған. Әлеге ваҡытта өр-яңы әҫәрҙәрҙе сәхнәләштереү менән мәшғүл. Илнурҙың кәләше Мәҙинә лә сәнғәт өлкәһен һайлаған — ул театр белгесе. Әле улдары Ильясты тәрбиәләй. Ләлә Зөфәр ҡыҙы өсөн ейәне — иң ҙур шатлыҡ, илһам сығанағы.

Ләлә Зөфәр ҡыҙы ғилми-методик эш менән дә әүҙем шөғөлләнә. Ул сәнғәт институтында уҡыусы 1—4 курс студенттары өсөн йыйынтыҡ әҙерләгән. Унда башҡорт халыҡ йырҙары һәм башҡорт композиторҙарының әҫәрҙәре тупланған. Был йыйынтыҡ менән Өфө сәнғәт академияһы студенттары ғына түгел, Мәскәүҙәге Щепкин исемендәге театр училищеһында уҡыусылар ҙа файҙалана. Ләлә Зөфәр ҡыҙы тарафынан актерҙар бүлеге студенттарын йырларға өйрәтеү буйынса программа төҙөлгән. Ул Башҡортостандың башҡа театр коллективтарына ла ярҙам итергә өлгөрә. Уҙған йыл Стәрлетамаҡ драма театрында данлыҡлы «Ғәлиәбаныу» драмаһы яңынан сәхнәгә ҡуйылды (режиссеры — Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Нурия Ирсаева). Был спектаклде музыкаль йәһәттән Ләлә Зөфәр ҡыҙы биҙәгән, төп партия — Ғәлиәбаныуҙы уның уҡыусыһы Резеда Зәйнуллина башҡара. Заман һулышын тойоп, йәштәр менән йәнәш ижад итә белеүе отошло. Композитор Урал Иҙелбаев менән тығыҙ бәйләнештә, бер-береһен ярты һүҙҙән аңлап эшләйҙәр.

Һәр эшкә өлгөрә Ләлә Зөфәр ҡыҙы. Педагогик эшмәкәрлеге менән бер рәттән концерттарҙа ла йыш сығыш яһай. Матур, моңло тауышлы йырсының репертуары бай. Уның йырҙары радио һәм телевидение аша йыш яңғырай. Ғөмүмән, халыҡ яратып тыңлаған, үҙ иткән йырсы ул. Йырындағыса, һәр йыры ихлас бүләк, күңел ҡыуанысы. Киләсәктә лә шулай ҡыуанып һәм ҡыуандырып йәшә, тип әйтәһе килә талантлы йырсы, оҫта педагог Ләлә Муллабаеваға.